# Бала
# һәм сит кеше



## Хөрмәтле ата- әсәләр!

Йыш ҡына закон боҙоусылар балаларҙың тиҙ генә ышанып барыусанлыҡтарынан файҙалана. Быға беҙ үҙебеҙ өлкәндәр ғәйепле. Урамда, йәмғиәт урындарында, транспортта сит кешеләр менән рәхәтләнеп һөйләшәбеҙ. Бала быны күрә лә, миңә лә сит кешеләр менән аралашырға мөмкин, тип уйлай.

Донъла насар ниәтле кешеләр ҙә барлығын онотмайыҡ. Һәм һаҡланыу сараларын белеү бер кемгә лә ҡамасауламаҫ тип уйлайым.



# Бәләкәй бала белергә тейеш:

- Телефон аша һөйләшкәндә, үҙеңдең өйҙә яңғыҙ булғаныңды әйтмә. «Ата- әсәйемдең әлеге ваҡытта һеҙҙең менән һөйләшергә ваҡыты юҡ. Һуңыраҡ улар үҙҙәре һеҙгә шылтыратырҙар»,- тип әйтә алаһың.
- Өйҙә яңғыҙ булһаң, бер кемгә лә ишекте асма.
- Ата- әсә рөхсәтенән тыш, өйгә бер кемде лә саҡырма.
- Ата- әсәне иҫкәртмәйенсә, өйҙән сығып китмә.
- Ата- әсәнән рөхсәт алмайынса, сит кеше машинаһына ултырма.
- Ата- әсәнән һорамайынса ят кешенән кәнфит йәки берәй бүләк алма.
- Лифтҡа ят кешеләр менән инмә.
- Буш торған йорттар, биналар тирәһендә уйнама.
- Әгәр кемдер һине һинең ризалығыңдан тыш алып китергә теләһә, тирә- яҡтағы кешеләрҙән ярҙам һорап ҡысҡыр.
- Әгәр ят машина һинең артыңдан бер ҙә ҡалмай килә икән, ҡаршы яҡҡа китергә тырыш.
- Бала адресын, өй телефонын белергә тейеш. Йәки ата- әсәһененң кәрәҙле телефон номерын үҙе менән алып йөрөргә тейеш.
- Өлкән кеше бала теләмәгән берәй нимә эшләргә маташһа, бала «Юҡ!»,- тип әйтә алырға тейеш.
- Ят кеше баланың тәненә ҡағылырға, енес ағзаларына тейергә тейеш түгеллеген аңлатығыҙ.
- Кемдер балаға енес ағзаларын күрһәтә икән, был турала ул ата- әсәһенә, тәрбиәселәренә әйтергә тейеш.
- Өлкән кешеләрҙән кемдер: «Был турала бер кемгә лә әтмә!», - тип иҫкәртһә, был турала мотлаҡ ата- әсәгә әйтергә.
- Һатыу сауҙаһында йәки магазинда аҙашһаң, кассирҙан, һатыусынан, администраторҙан ярҙам һорай алаһың.

# Ата- әсәләр белергә тейеш:

- Баланың исеме яҙылған кейем йәки уйынсыҡ һатып алмағыҙ. Сөнки балаға насар ниәтле кешеләр исеме менән өндәшһәләр, ул ҡурҡыныс барлығын һиҙмәйәсәк.

- Балағыҙҙың дуҫтарына ихтибар итегеҙ, уларҙың ниндәй икәнен тикшереп торoғоҙ.

- Бер минутҡа ла баланы йәмғиәт урындарында, коляскала йәки машинала яңғыҙ ҡалдырмағыҙ.

- Йәмғиәт урындарҙа баланы бәҙрәфкә яңғыҙ ебәрмәгеҙ.

-Ташландыҡ, кешеһеҙ урындарҙа уйнарға ярамай икәнлеген аңлатығыҙ.

- Баланы балалар баҡсаһына, бассейнға, мәктәпкә алып барһағыҙ, ишектән индереп ебәрегеҙ. Шулай тыныс булыр.

- Балаға ҡурҡыныс янағанда, бала кемгә мөрәжәғәт итә, нисек ярҙам һорай ала икәнен һөйләгеҙ.

- Баланың хәҙерге йәштәге төҫлө фотоһы һаҡланырға тейеш.

- Балаға адресығыҙҙы өйрәтегеҙ.

- Балағыҙҙың янғын һүндереү, тиҙ ярҙам, полицияның телефон номерҙарын белгәнен тикшерегеҙ.



## Бала өсөн

Бар хәстәрем, бар хистәрем – бала өсөн,
Хеҙмәтем дә, хөрмәтем дә – бала өсөн,
Үкенеүҙәр, үтенеүҙәр – бала өсөн,
Йоҡоһоҙ төн, тынғыһыҙ көн – бала өсөн,
Утҡа-һыуға уҡталыуым – бала өсөн,
Сығыр юлдан туҡталыуым – бала өсөн,
Таңдан әүәл ҡайнар аш та – бала өсөн,
Тәгәрәгән ҡайнар йәш тә – бала өсөн,
Иртә-кисем, йөрәк хисем – бала өсөн,
Барлыҡ эшем, барлыҡ көсөм – бала өсөн,
Янам – түҙәм, көйәм – һүнәм, –бала өсөн,
Ғорур башты түбән эйәм – бала өсөн,
Төндәр тыуһа, иртә көтәм – бала өсөн,
Күңелемдә йырҙар йөрөтәм – бала өсөн.

